Башҡортостан Республикаһы Йылайыр районы муниципаль районының
«Йомағужа ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе»
Муниципаль мәғәриф автономлы учреждениеһы

Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына һәм Башҡорт теле йылына арналған «Йөрәк һүҙе» ижади шығырҙар бәйгеһе

Төҙөнө : Иҫәнбаева Мөнирә Марат ҡыҙы,
башланғыс кластар укытыусыһы

Йомағужа-2020

Башланғыс класс һәм ата-әсәләр менән Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған « Йөрәк һүҙе» ижади шығырҙар бәйгеһе өсөн әҙерләнгән байрам сценарийы.

Төп маҡсат: һуғыш ветерандарын иҫкә алыу, ихтирам**,** ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, Тыуған еребеҙгә, телебеҙгә мөхәббәт, әҙәбиәткә һәм мәҙәниәткә һөйөү, ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу, берҙәмләштереү .

Үткәреү урыны; мәктәп, актовый зал

Йыһазландырыу: шарҙар, һуғыш йылын һандар менән сағылдырған яҙыуҙар, укыусылар алып килгән ветерандарҙың фотолары сәхнә түрендә, ноутбук, һуғыш йылдары тураһында йырҙар.

Ҡатнашалар: 1-се һәм 2-се класс уҡыусылары һәм ата-әсәләр

Жюри ағзалары: Музафаров С.Й..Аҡҡужина Ф.Ф.,Вәхитова Ғ.Д.

Алып барыусылар: Башланғыс класс уҡытыусылары Аҡҡужина Фәриғә Ғәтиәт ҡыҙы, Иҫәнбаева Мөнирә Марат ҡыҙы

1-се алып барыусы: Бөйөк Еңеү! Һин бит беҙҙең өсөн
Яҙғы гөлдәй йәшһең, күркәмһең.
Ләйсән төҫлө сафһың.Ә бит үҙең
Тамуҡ яфалары күргәнһең.

2-се алып барыусы: Еңеү!Ҡояш балҡый бер битеңдә,
Бер битеңдә – моңһоу ай һаман,
Бер күҙеңдән шатлыҡ нуры һибелә,
Бер күҙеңдән әсе йәш тама.

9 май - Еңеү көнө...Бөгөнгө йәш быуын өсөн ул – Хәтер көнө. Нисек кенә атаһаҡ та, был көн һуғыш менән бәйләнгән.

Ҡәҙерле туғандар!Әйҙәгеҙ, бер минутҡа тын ҡалайыҡ. Һуғышта ятып ҡалған олатай-бабайҙарыбыҙҙың, атайҙарыбыҙҙың исемдәрен әйтеп, уларҙың рухтарына тыныслыҡ теләйек.

1 минут тынлыҡ.

1-се алып барыусы: Ҡәһәрле һуғыш **1418** көн һәм төн дауам иткән. Күпме әсәләр - улһыҙ,балалар - атайһыҙ, ҡыҙҙар - һөйгән йәрһеҙ,ҡатындар - ирһеҙ ҡалған.Яуҙа ятып ҡалған һалдаттар һәйкәлдәр булып әйләнеп ҡайтты көткәндәр янына.

Тотош ил буйынса **27 миллион** ҡорбан,**1710 ҡала**, **70 меңдән** артыҡ ауыл яндырыла.Беҙҙең Башҡортостандан һуғышта **700 меңдән** ашыу яугир ҡатнашып,шуларҙың **300 меңдән** ашыуы яу яланында ятып ҡала.

2-се алып барыусы: Бөйөк Еңеүзең 75 йыллығына арналған « Йөрәк һүҙе» ижади шығырҙар бәйгеһен асыҡ тип иғлан итәбеҙ.

Дан йырлаһын Ер шарында «Йөрәк һүҙе»
Илен яҡлап утҡа кергән һалдаттарға!
Бар дөрөҫөн һөйләп бирһен "Йөрәк һүҙе»
Шул һалдаттар яҙмыштарын башкаларға...
Уйлатһын да, илатһын да «Йөрәк һүҙе »
Ишеттереп ,
Әсәләрҙең доғаларын,
Тол ҡатындар ауаздарын,
Йәтим ҡалған балаларҙың һыҡтауҙарын...
Иҫкә алып шул һуғыштың ҡорбандарын
Илатһын да, уйлатһын да "Йөрәк һүҙе "!...
Набат булһын, набат булһын "Йөрәк һүҙе **"**!!!

1-се алып барыусы: Хөрмәтле уҡыусылар, ата-әсәләр, рөхсәт итегеҙ жюри ағзалары менән таныштырып китергә (жюри менән таныштырыу)

2-се алып барыусы: Сығыш яһау тәтрибен йәрәбә һалып асыҡлаясаҡбыҙ (йәрәбә һалыу)

Башланғыс класс уҡытыусылары, Аҡҡужина Фәриғә Ғәтиәт ҡызы һәм Иҫәнбаева Мөнирә Марат ҡызы ,бәйгене Рафаэль Сафиндың «Тол катындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе" шығыры менән бәйгене башлайҙар.

Йәрәбә буйынса, алып барыусылар, бәйгеселәрҙе сәхнә түренә саҡырып торалар.

Бәйгеселәр сығыштарынан һуң, жюри ағзалары баһалағансы, укыусылар сығышы.

"Мин дә һалдат булам"
"Ерҙән һалдат атлай"
«Олатайым миҙалдары" йырҙарын башҡарыу.

1**-се алып барыусы:** Беҙҙең бөгөнгө «Йөрәк һүҙе" шиғри конкурсыбыҙҙы баһалап ултырыусы абруйлы жюри ағзаларына һүҙ бирәйек!

2-се алып барыусы:

Һуғыш йылдан – йыл йырағая бара, ә ветерандарҙың, һуғышта ҡатнашыусыларҙың сафтары һирәгәйә.

1945 йылдың Еңеү көнөндә 18- 20 йәштә булған ир- егеттәр, бөгөн күптәре юктар инде, беҙ, был тыныс тормошта йәшәүебеҙ менән Һеҙгә бурыслыбыҙ, хөрмәтле ветерандар!

1**-се алып барыусы:** Беҙҙең сарала әүҙем ҡатнашканығыҙ, әйтер йөрәк һүҙегеҙҙе беҙгә лә еткергәнегеҙ өсөн рәхмәт! Илебеҙ тыныс, күгебеҙ аяҙ булһын!

Еңеү! Ниндәй матур хәбәр!
Көрәш тә юҡ, тынды һуғыш та.

Бәйгелә ҡатнашыусылар “ ***Батырҙар йыры”*** йырын башҡаралар